*Мирас ИҘЕЛБАЕВ*

*Һүҙ сәнғәтендә «ауыҙ-тел әҙәбиәте» тигән төшөнсә бар. Ул — фольклор ҙа, яҙма әҙәбиәт тә түгел, ә профессиональ авторҙың телдән сығарылып, текксын үҙгәртмәйенсә телдән таралған һәм конкрет уй-караштары, эстетик идеалдары, индивидуаль стиле, һүрәтләү саралары сағылыш тапкан ижад емеше. Уның аҙак кағыҙға теркәлеүе мөмкин.Әммә быға тиклем күпмелер вакыт — киң катлам тыңлаусыһына үтеп ингәнсә — автор йәки бүтән башкарыусылар тарафынан телдән таратылырға тейеш. Ауыҙ-тел әҙәбиәте донъя һүҙ сәнғәтендә төрлө тарихи-географик төбәктәргә хас булған. Боронғо Шумер, Кытай, Һинд, Греция, Урта быуаттарҙағы фарсы, ғәрәп, Көнбайыш Европа, Скандинавия илдәре, Рәсәй әҙәбиәттәренең телдән таралыуы билдәле. Төрки халыктарының, шул иҫәптән башкорттарҙың да, кабатланмаҫ бай тарихлы ауыҙ-тел әҙәбиәте бар. Башкорт ауыҙ-тел әҙәбиәтенең үҫеш этаптары, төрлө дәүерҙәрҙә күтәргән проблемалары, төп үҙенсәлектәре донъя ауыҙ-тел әҙәбиәте традициялары менән ифрат ғәжәп тап килә.*

*Башкорт һүҙ сәнғәтендә ауыҙ-тел әҙәбиәте вәкилдәре — йырауҙар һәм сәсәндәр. «Ватандаш» журналы уларҙың иң күренеклеләренең ижады менән таныштырып барырға булды. Журналдың быйылғы 3-сө һанында Каҙтуған йырау тураһында мәкәлә баҫылғайны. Артабан XIV-XIX быуаттар йырауҙары һәм сәсәндәре хакында материалдар донъя күрәсәк. Әгәр танышып барһағыҙ, халкыбыҙҙың ысынлап та донъя һүҙ сәнғәте кимәлендәге ауыҙ-тел әҙәбиәте хазиналары барлығына үҙегеҙ ҙә ышанырһығыҙ.*

Асан Ҡайғы йырау XIV—XV быуаттарҙа йәшәгән. Ул сама менән 1361—1370 йылдар тирәһендә Волга буйында тыуған, тип яҙа М.Магауин. Ҡаҙаҡ легендалары уның атаһының исеме Сайшты Сабит булған, йырау үҙе оҙон ғүмер кисергән, тип бара («Ел әңгімелері Асанның әкесінің аты Саяшты Сабит екен дейді... Асан Ҡайғыны узак өмир сургенін байҡаймыз» — Ертадегі ҡазаҡ әдәбиәті хрестоматиясы. — Алматы, 1967. — 16-сы бит). Үлгән йылы теүәл билдәле түгел. 1465 йылда, Ҡаҙаҡ ханлығы үҙенең хакимлығын Үҙәк һәм Төньяҡ-Көнбайыш Ҡаҙағстанға таратҡан саҡта, ул, күрәһең, әле иҫән булған, бик оҙаҡ йәшәп, Олотау яғында Һары Арҡа ерендә донъя ҡуйған. Атаһынан күрмәкселер, Асан бик йәшләй үк күп яҡлы һөнәр эйәһе булып танылған: думбырала оҫта уйнаған, көй, өләң сығарған, мәргән ата белеүе менән дан алған — кәрәк икән, ҡоралайҙың күҙенә атып тейҙергән. Уның улы Абат та батыр исемен йөрөткән. Абат хаҡында халыҡ араһында «аңыз» күп таралған, тип яҙа Ә. Дербисәлин һәм шуларҙың береһен килтерә. Аҡтүбә өлкәһенең Ҡобда районы Ново-Алексеевка ауылынан көнсығышҡа ҡарай ун саҡырымлап алыҫлыҡтағы Байтаҡ тигән ерҙә ҡыҙыл кирбестән һалынған зыярат бар. Урындағы халыҡ уны Абаттың зыяраты, ти. Ошо яҡта үткәрелгән оло йыйында бәйге ваҡытында аты өркөп китеп, Абат йығылып һәләк булған икән...

«Ғайса улы Әмәт» ҡомарҡыһының ҡаҙаҡ версияһында Асан Ҡайғы Ағиҙел буйында йәшәгән, тиелә. Ҡарағалпаҡ ғалимы К. Мәмбәтов яҙыуынса, «Асан Ҡайғының өмири халыҡ аузында аңызларға айланып кеткен». Ошо



09-2001.p65 157 29.08.01, 12:49
Black

легендаларға ҡарағанда, Асан Алтын Урҙа ханы Олуғ Мөхәммәттең яҡын кешеһе булған. XV быуаттың 20-се йылдарында Олуғ Мөхәммәт, Сарайҙан ҡыуылып, Литвала һыйыныу тапҡан, аҙаҡ Ҡазанда хан булып торған. Шул ваҡытта Асан Ҡайғы хандың һарайында йәшәгән. Артабан «белгисез сеҙбеплер менән Жәнибек ханның сарайында көринеди. Ул Жойдели Байсыҡ төбәгендә донъя ҡуйған».

Аҡтүбә — Агиҙел буйы — Ҡазан—Сарай—Ҡарағалпаҡ ере. Картаға ҡарап, ошо нөктәләрҙең ҡайҙа ятҡанлығын иғтибарға алһаң, Асан Ҡайғының аяҡ баҫҡан «легендар» территорияһын күҙ алдына баҫтырырға мөмкин. Төрлө быуын ҡаҙаҡ ғалимдары Ч.Вәлиханов, Ҡ. Хәлитов, М. Ауэзов, С.Сәйфуллин һ.б. Асан Ҡыйғы — нуғай сығышлы, Сыңғыҙ хандың замандашы һәм хәрби етәкселәренең береһе Майҡы бейҙең алтынсы быуын нәҫеле, тип билдәләй. Белеүебеҙсә, Майҡы бей исеме башҡорттарға ла яҡшы таныш. Табын, Тырнаҡлы ырыуҙары шәжәрәләренең легендар өлөштәре унан башлана. Икенсе төрлө әйткәндә, йырауҙың исеме һәм ижады Урал—Волга буйы, Урта Азия—Ҡаҙағстан яҡтарында таралған.

Ғ. Хөсәйенов беҙҙә Асан Ҡайғының ике импровизацияһын баҫтырҙы (Башҡорт әҙәбиәте антологияһы: XIII-XVIII быуаттар. — Өфө, 1999. —226-277-се б.). «Асан-Ата йыры» (23 юл) икешәр төрлө үлсәмле ике өлөштән тора. Тәүгеһе (11-11 ижекле) йырауҙың киләсәк тураһында төшөнкө кәйеф менән күрәҙәлек итеүенән ғибәрәт. Замандарҙың үҙгәреүе, әҙәмдәрҙең аҙыуы өсөн борсола. Ҡобайыр строфикаһы, үлсәме менән дауам ителгән икенсе өлөшөндә, тыңлаусыға мөрәжәғәт итеп, йырау һүҙенә ҡолаҡ һалыуҙарын һорай, әлеге хәтәр көндәр килмәһен өсөн хәстәрлек күрергә, алдан иҫкәртергә теләгәндәй итә:

Ҡайғылы быйдай хәбәргә
Эстән ҡәмәр һалһаң,
Илде сырмап алыр тим,
Алыр тим, ау, алыр тим.

«Күлдә йөрөгән аҡ өйрәк...» тип башланған фәлсәфәле йөкмәткеле икенсе импровизация әҙәм балаһының донъяны танып белеүҙә аң кимәле сикләнгәнлегенә, дөрөҫөрәге, бәғзеләрҙең үҙ-үҙҙәрен сикләүенә һыҡтыра. Йырауҙың үҙенең ундайҙарҙан өҫтөнлөгө, күп ер-һыу күреп, ҙур тормош тәжрибәһе туплағанлығы ла шәйләнеп ҡала унда:

Күлдә йөрөгән аҡ өйрәк
Ҡыр ҡәҙерен белмәҫ,
Ҡырҙа йөрөгән дуғаҙаҡ
Һыу ҡәҙерен белмәҫ.
..Күсенеп-ҡунып йөрөмәгән
Ер ҡәҙерен белмәҫ.

«Асан-Ата йыры»ның «Ишет быны ҡартындан...» тип башланған икенсе яртыһы (тулыһынса түгел, артабанғы 6 юл), «Күлдә йөрөгән аҡ өйрәк...» теүәл көйө тиерлек башҡорт халыҡ ижады репертуарында йөрөп ята. Был осраҡта уны отошло күренеш тип атарға мөмкин, сөнки «нуғай сығышлы» йырауҙың беҙҙең тарафтарға мөнәсәбәтле булғанлығын ҡәүәтләй. Ул юлдарҙың Асандыҡы икәнлегенә шикләнергә урын әҙ. Беренсенән, Асан Ҡайғының күпселек импровизациялары, ошо ике текст кеүек үк, сағыштырмаса ҡыҫҡа күләмле, тимәк, хәтерҙә ҡалдырыуы еңел, үҙгәрештәргә дусар ителеш ихтималлығы түбән. Икенсенән, быларының икеһе лә ҡаҙаҡ, ҡарағалпаҡ әҙәбиттәрендә күптән инде — Асан Ҡайғынықы. Аҙаҡҡыһы ҡаҙаҡта ла, ҡарағалпаҡта ла бөтөнләй тиерлек үҙгәрешһеҙ йөрөй. Беҙҙәгеһе лә шулай: ҡаҙаҡ, ҡарағалпаҡ текстарына һүҙмәһүҙ, юлы-юлға тап килеп тора. Тимәк, беҙҙә лә халыҡ ижады репертуары араһында «йәшереп» кенә ҡотолорлоҡ булмай — Асандыҡы. Баҫмаға һайлағанда, Ғ.Хөсәйенов та был импровизацияларҙың башҡорт ерлегенә яҡынлығын ана шул халыҡ араһында таралыуында күргәндер. Әммә Асан Ҡайғының башҡа әҫәрҙәрендә лә үҙебеҙҙең ерлектең рухын таба алабыҙ.

Ҡаҙаҡтарҙа Асан Ҡайғы импровизациялары үҙ авторлығы менән күберәк һаҡланған. 1982 йылда сыҡҡан «XV-XVIII гасырлардағы ҡазаҡ поэзиясы» тигән йыйынтыҡта уның әҫәрҙәренең 19 тексы донъя күргән (260 юл). Ҡарағалпаҡтарҙа К. Мәмбәтовтың «Әййемги ҡараҡалпаҡ әдебияты» китабының «Асан Ҡайғы» бүлексәһендә 12 текст урынлаштырылған. Күбеһе ҡаҙаҡ баҫмаһындағыларға үҙгәрешһеҙ тиерлек тап килә. Бөтәһен бергә ҡарағанда, ңигеҙҙә өс тематик төркөм күҙәтелә: Йәнебәк ханға мөрәжәғәт, тормошкөнкүреш хаҡында фәлсәфәүи уйланыуҙар, әҙәп-әхлаҡ мәсьәләләре буйынса халыҡҡа өгөт-нәсихәт.

Ҡаҙаҡ баҫмаларында Йәнебәк ханға тәғәйенләнгән өс текст бар. Ҡарағалпаҡтарҙа — икәү. Әммә улар — күршеләрендәге бер импровизацияның урталай бүленгән ике киҫәге. К. Мәмбәтов иҫкәртеүенсә, 60-сы йылдар урталарында ойошторолған экспедициялар



09-2001.p65 158 29.08.01, 12:49
Black

ваҡытында оло быуын кешеләренең береһенән («Дәүләтмурат гарры») яҙып алынған. Тимәк, халыҡ хәтерендә йөрөгән. Шуға ҡарамаҫтан, Ҡаҙаҡ ССР-ы Фәндәр академияһының ғилми китапханаһындағы ҡулъяҙмаларҙан алып баҫтырылған версияға үтә яҡын, әйтерһең, ошо сығанаҡтан алынған. (К. Мәмбәтов баҫмаһындағы бүтән текстар хаҡында ла шуны уҡ әйтергә мөмкин).

Асан Ҡайғының Йәнебәккә мөрәжәғәттәренән сығып, хан йорто менән аралашҡан, хандың үҙенә яҡын торған йырау һәм сәсәндәрҙең хакимдарға ниндәй мөнәсәбәттә булғанын (булырға тейешлеген) күҙ алдына баҫтыра алабыҙ. Импровизацияларҙың контексына ҡарағанда, Асан Ҡайғы үҙен Йәнебәк хандан бер башҡа өҫтөнөрәк тота: уға әйтер һүҙе ҡәтғи, «тауышы» уҫал. Хан менән тәүәккәл һөйләшеүенең хикмәте — үҙенең артында халыҡ көсөн тойоуында. Яңғыҙы түгел, халыҡ исеменән өндәшә ул. Текстарҙа хакимға бер нисә аныҡ дәғүәһе төҫмөрләнә. Идара итеүҙең дөйөм мәсьәләләре лә, конкрет хәл итә торғандары ла ҡуҙғатыла унда. Берҙән, йырауға Йәнебәктең идара итеү ысулы оҡшамай, үҙен генә ҡайғырта, илдә эше юҡ:

Жабығып жатҡан халҡың бар,
Елиңде гөзлеп көрмейсең,
Ҡымыз ишип ҡызынып,
Ҡызыраңлап терлейсең.
Өзинен басҡа хан жоҡтай,
Елеүлеп неге сөйлейсең
(ҡарағалпаҡ телендә).

Өҫтәүенә, байлыҡ-мөлкәт йыйыу менән ҡыҙыға, халыҡтың ас-яланғас йәшәгәненә иғтибар итмәй:

Орынсыз келген салыҡтан
Ғәзийнеңди толтырдың
Алтын менән гүмиске...
(ҡарағалпаҡ).

Йәнә, хан үҙенең баш-баштаҡлыҡтары менән йәмәғәтселектә ризаһыҙлыҡ тыуҙыра. Мәҫәлән, матур тәбиғәте, «ҡырында киік жайлаған, суында балыҡ ойнаған» Уйыл буйында тыныс ҡына йәшәп ятҡан кешеләрҙе кәңәшһеҙ-ниһеҙ икенсе урынға күсерергә булып китә:

Ойыл көздің жасы еді,
Ойылда кеңес ҡылмадың,
Ойылдан елді көшірдің
(ҡаҙаҡ телендә).

Аҙаҡ килеп, йырау хакимдың белдекһеҙлегенә ишара яһап ҡуя; шул хәленә ҡарамаҫтан, уның кәңәшен тотмауына йәне көйә:

Мен айтпасам билмейсең,
Айтканыма көнбейсең
(ҡарағалпаҡ).

... Ай, Жәнібек, ойласаң,
Киле заман болмай ма?
Муны неге білмейсің?
Ҡош, аман бол, Жәнібек,
Енді мені көрмейсің! (ҡаҙаҡ).

Бындай һүҙҙәрҙе ханға Асан ғына әйтә алған, күрәһең. Бер Йәнебәк кенә түгел, бүтән хакимдар менән дә ул шулай иркен, ғорур һөйләшкәнгә оҡшай. Ҡаҙаҡтар араһында «Асан менән Ежен хан» тигән риүәйәт һаҡланған. Элек уларҙың «күп ерен тартып алған ҡалмыҡ ханы Ежен», ярлыҡ сығарып, ҡаҙаҡтарға: «Йылҡыларығыҙҙы кешнәтмәгеҙ, маҙамды алалар, был бойороҡто үтәмәһәгеҙ, ҡаты язалайым!» — ти икән. Халыҡ йылҡыны нисек кешнәтмәү юлын таба алмай аптырағанда, йәш Асан үҙенең ике-өс юлдашын алып, Ежен ханға киткән. Уның иленә ингәс, ҡаршыға өрөп сыҡҡан бөтә эттәрҙе ҡыра икән. Был хаҡта хәбәр ханға еткән. Янына килгән Асандан: «Эттәрҙе ниңә ҡырҙың?» — тип һораған. «Уның сәбәбе бар. Мин ҡуй көткәндә, бер көн уларға йыртҡыс ябырылды. Ҡысҡырып, ауылдағы эттәрҙе саҡырҙым. Бер эт тә килмәне. Шунан бирле эт йәнлегенә үс булдым; ҡайҙа күренһәләр ҙә, ҡоротормон тип, үҙ-үҙемә һүҙ бирҙем. Һинең илеңдәге эттәрҙе ҡырыуымдың да сәбәбе шул», — тигән Асан. «Эй ахмаҡ, һинең әллә ҡайҙан саҡырған тауышыңды эттәр нисек ишетһен?» — тип көлгән хан. Асанға етә ҡалған: «Дөрөҫ әйтәһең. Беҙҙең йылҡыларҙың кешнәгән тауышы һинең әллә ҡайҙа ятҡан илеңә нисек ишетелһен!» — тип яуаплаған ул. Ежен, һүҙ таба алмай, еңелеп ҡалған. Шулай итеп, Асан үҙ ил-йортон ҡәһәрле хандың язаһынан ҡотҡарып алып ҡалған... Күрәһегеҙ, был риүәйәт Асан Ҡайғының халыҡты бәғзе хакимдарҙың тупаҫ баш-баштаҡлығынан ҡурсалаусы вазифаһын сағылдырып бирә.

Йырауҙың асыҡтан-асыҡ дидактикаға ҡоролған импровизациялары күп түгел. Телгә алынған баҫмаларҙан ике текст эҙләп таптыҡ. «Иҙел бул да, Яйыҡ бул», тип башланғаны кешеләрҙең үҙ-ара мөнәсәбәтенә бәйле әхлаҡ-тәртип мәсьәләләрен күтәреп сыға: юлдашыңа яу килһә, йәнеңде аяп торма, йүнһеҙ кешеләр менән бәхәскә инмә, ялған һүҙ һөйләмә һ.б. Икенсеһе («Атанан алтау тыуҙым тип...») донъялыҡта йәшәү әхлағы өлкәһендә кәңәштәр бирә: атам малы күп тип шапырынмағыҙ, бергә йәшәгеҙ, гонаһ йыймағыҙ, «әхирәткә барғанда, хаҡ [тәғәлә] ҡаршыһында торғанда Хызырҙың үҙе» һымаҡ булығыҙ... Дидактик шиғриәт, ғәҙәттә,



09-2001.p65 159 29.08.01, 12:49
Black

автор шәхесенең мөһим бер һыҙатына һуктыра, унын ижтимағи тормоштағы дәрәжәһен билдәләй. Хандарҙың ханына ҡарағанда, халыҡтың үҙенә кәңәш биреү еңелдән түгел. Бының өсөн бөтә илдә абруй ҡаҙанырға, тотош халыҡтың һиңә ҡарап тороуын, һүҙеңә мохтажлыҡ кисереүен тойорға кәрәк. Аҡыллы булған кеше шундай шарттарҙан тыш өгөт-нәсихәткә тотонмаясаҡ. Ә йырау исемен йөрөткән кеше — аҡыл эйәһе.

Асан импровизацияларында фәлсәфә иң үҙәктә тора, ижадының төп асылын билдәләй. Заманында уны Ч.Вәлиханов «дала философы» тип атаған. Йырауҙың фәлсәфәүи уйланыуҙар диапазоны гәйәт киң, әммә ваҡ түгел. Ул тереклек итеүҙең көндәлек ығы-зығылары менән түгел, ә тормоштоң оло, юғары төшөнсәләре менән эш итә: ил, халыҡ, хаким, ер, йәшәйеш, дуҫ-дошман, яҡшылыҡ-яманлыҡ, ир-егет, дан-шөһрәт... Ошо тәркөмгә ҡараған шиғриәтен тотош күҙ уңында тотҡанда, Асан Ҡайғы фәлсәфәһенең бирелеш композицияһы күҙ алдына баҫа. Ул осло түбәле геометрик есемде — пирамиданы хәтерләтә. Фәлсәфәүи «есемдең» нигеҙе — тәбиғәт. Беҙҙә уратып алған күренештәрҙең биҙәктәре файҙаланылған ябай оҡшашлыҡ — йәнәшәлек кенә түгел, ә тәбиғәт донъяһының үҙенең күп төрлө, күп яҡлы законлыҡтары. Улар һоҡланғыс, ҡаҡшамаҫ, аяуһыҙ, кире ҡаҡҡыһыҙ... Авторҙың артабанғы тормош фәлсәфәһенә ысын мәғәнәһендә нигеҙ, сөнки тәбиғәт барыбыҙға ла таныш, унын законлыҡтары бөтәбеҙгә лә бала саҡтан аңлайышлы хәҡикәт («Таҡырлауға ҡонған ҡаз, торна таң маңында ушар ол»; «Ҡаз өйрәге болмаса, айдын шалҡар көл ғарып»; «Турымтай торғай иле алмас, ҡанаты сынып ҡайрылса» — ҡаҙ.) Йырауҙың ошо нигеҙгә ҡоролған бүтән төрлө фәлсәфәһе лә шулай кире ҡаҡҡыһыҙ хәҡикәт рәүешендә ҡабул ителә.

Саҡ ҡына үрҙәрәк һанап үтелгән оло төшөнсәләр фәлсәфәһе (ил, халыҡ...) тап шул нигеҙгә ҡоролған стенаны, пирамиданың уртаһын тәшкил итә. «Асан Ҡайғы шын мәнисенде де адасҡанды жолға сала туғын хаҡыйҡат аҡыл ийеси сыпатында көринди», тип яҙҙы К.Мәмбәтов. Тәбиғәттең һәм тормоштоң ҡатмарлы, баш еткеһеҙ аҡыллы бәйләнешенә үҙенән-үҙе һалынған фәлсәфәне күптәр, бәлки, күреп тә бармайҙыр, ә йырау уларҙы күрһәтә, шул хаҡта уйланырға, һәр нәмәнең асылын эҙләргә ярҙам итә. Бына «Ҡойрого юҡ, ялы юҡ» тип башланған әҫәр. «Аяғы жоҡ, ҡолы жоҡ, жылан кәйтип күн көрер?» (ҡарағалп.) — был һорау Асандыҡы. «Донъяға яраҡлашҡан, бығаса көн күргән, артабан да әмәлен табыр!» — быныһы тыңлаусыныҡы. Моғайын, шулай тип яуап бирер ине ул. «Шыбын шыкса жаз болып, тазлар кәйтип күн көрер?». Был һорауға ла яуап табылыр: «Таҙҙың хәле йыландыҡынан мөшкөлөрәк, әммә барыбер йүнен табыр: бөгөн генә пеләшләнмәгәндер бит, себенде күргәне барҙыр әле...» Асан инде мөһимерәк һорау ҡуя:

Хан менен бийләр ҡысҡанда,
Халыҡ кәйтип күн көрер?

Был юлы тыңлаусы уйланырға мәжбүр: күпме шулай көн күрергә мөмкин? Ниндәйҙер сараһын табырға кәрәк.

Асандың фәлсәфәһе тәрән — донъя ҡатмарлы, һәр нәмәнең үҙ тәртибе, тиҙ генә иҫәпте хисапҡа тура килтерермен тимә. «Заманыңды яманлап...» импровизацияһында ла автор, тәү ҡарамаҡҡа бер-береһенә тиң һымаҡ фекерҙәрҙе һанап («Арғымағың жамандап, тулпар ҡайдан табырсың?»; «Аҡ тоныңды жамандап, атлас ҡайдан табырсың?» —ҡаҙ.), үҫтерә барып, ҡатмарлырағын ҡуя:

Өз басыңды зорайтып,
Теңдес ҡайдан табырсың?

Был һүҙҙәрҙән һуң тағы ла уйлана төшәһең: толпары, атласы бәлки табылыр ине лә, ә үҙеңде ҙурға һанап түбәнһеткән тиңдәшеңде ҡабат таба алырһыңмы?

Иҫәп — хисапҡа, тигән кеүек, фани донъяла исеме есемгә, форма йөкмәткегә тап килергә тейеш («Аҡ билегиң болмаса, билезик салмаҡ не пайда?»; «Куу мойының болмаса, моншек таҡмаҡ не пайда?» — ҡарағалп.) Шулай булғас, фиғелең, ҡылған эшең һинең кемлегеңде күрһәтеп тора:

Бәхти жүрген ерлердиң
Хәр бир иси оң келер,
Басындағы дәүлети
Кинлеп күнге мол болар (ҡарағалп.).
Аҡылдының белгісі,
Өткен істі ҡумаса
Жамандардың белгісі, —
Жауға ҡарсы турмаса,
Залымдардың белгісі, —
Бейбіттің малын урласа (ҡаҙ.).
Йәки:
Кадірін жеңге білмесе,
Бойға жеткен кыз ғарып.
...Ата журты букара
Өз ҡолында болмаса,
Ҡанша жаксы болса да,
Ҡайратты туған ер ғарып (ҡаҙ.).



09-2001.p65 160 29.08.01, 12:49
Black

Иғтибар иткәнһегеҙҙер, Асан Ҡайғы фәлсәфәләренең һәр йүнәлешенең осо моңһоу йомғаҡлана. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, исемде-есемде йыш ҡына мөлкәт менән үлсәйҙәр; кешелек дәрәжәһе малың менән баһалайҙар:

Төрден орын тимейди,
Патша болсын — малы азға (ҡаҙ.).

Стенанан бейегерәк — түбә. Асан Ҡайғы фәлсәфәһенең түбәһе — кешенең донъяла туплаған тормош тәжрибәһе, ғилемлелек һәм шуларҙы файҙаға егеү, халыҡҡа хеҙмәт иттереү хаҡында. Ғилемлелек төшөнсәһенә йырау айырыуса ҙур әһәмиәт бирә, фәлсәфәүи йөкмәткеле шиғриәтендә уға ҡағылышлы фекерҙәр йыш осрай. Әммә Асан яланғас ғилемлелекте мөрхәтһенмәй, уны тормош, халыҡ, йәғни, кем өсөн тәғәйенләнә, шулар менән берлектә күҙ алдына баҫтыра. Халыҡ аҡылына таянмаған ғилем эйәһе әллә ҡайҙа китә алмай:

Ғылымым журттан асты деп,
Кеңессіз сөз бастама,
Жас, кәрілер отырып,
Алдынан сабаҡ алмаса,
Ҡарамаса жүзіне,
Ғалым да болса олғарып (ҡаҙ.).

Үҙ сиратында кешеләр ҙә ғалим тарафынан тәҡдим ителгәнде ала, файҙалана белергә тейеш:

Надандардың белгісі —
Білгеннің тілін алмаса,
Ҡарияларың жамандан,
Ҡенес ҡайдан табарсың?
Ғылымның ҡандай пайдасы —
Білместі жолға салмаса (ҡаҙ.).

Түбәнән юғарыраҡта — ҡыйыҡта, пирамиданың иң осонда ни һуң? Йырау өсөн һүҙҙән ҡиммәтерәк нимә бар! Һүҙ хаҡында фәлсәфәне уның һәр импровизацияһында тиерлек табабыҙ. Телдең һөйәкһеҙлегенән алып («Таңдайға біткен ҡызыл тіл, жаҡҡа біткен отыз тіс, тірлікте не шайнасаң, жутар ол» — ҡаҙ.), әйтелмәй ҡалған ҡиммәтле һүҙҙең әрәм булыуына тиклем («Жаҡсыларға айтпаған асыл шырын сөз ғарып» — ҡаҙ.) уйлана йырау. Һүҙҙең үҙенә генә арналған бик матур бер 8 юллыҡ бар:

Таза минсыз хасыл тас,
Суу түбинде жатады.
Таза минсиз хасыл сөз
Ой түбинде жатады.
Суу түбинде жатҡан тас,
Жел толҡытса, шығады.
Ой түбинде жатҡан сөз
Шер[1] толҡытса, шығады (ҡарағалп.).

Моғайын, ошо текстың аҙаҡҡы юлдары Асан Ҡайғы ижадының бар асылын әйтеп бирәләр. Фәлсәфә, «дала фәлсәфәһе» икәнлеге шикһеҙ. Уны бөгөнгө көн ғалимдары ла ҡабатлай: «Асан Ҡайғы термелеры огада терең ой менеп берилген болып, үлкен философиялыҡ мәниде» ( К.Мәмбәтов). Тағы шуны өҫтәп әйтергә булыр ине — борсоулы, моңһоу фәлсәфә менән һуғарылған уның ижады. Йырау низелер эҙләй, көтә, борсола. «Он сумел дать суровую оценку смутному периоду в истории тюркских народов, предвидел крах и распад Золотой Орды, на смену которой придут мелкие ханства, раздираемые междоусобицами», — тип яҙғайны М.Магауин. Ошо урында ҡаҙаҡтарҙа, ҡарағалпаҡтарҙа таралған йәнә бер риүәйәт иҫкә төшә: «Асан жайындағы халыҡ аңыз- әңгімелерірің мағаналы, маңыздысы»! Бер заман Асан, атҡа атланып, яҡшы ерҙәр эҙләп сығып китә. Тапҡан төбәктәренең бөтәһен дә оҡшата: мал-тыуар көтөр өсөн һәр ҡайһыһы үҙенсә уңайлы. Әммә йырау ҡәнәғәт түгел. Төрлө яҡлап ҡулай булған, «суы — сүт, жағасы — балҡаймаҡ» кеүек үҙәнде эҙләй, ни бары хыялында ғына таба. «Жер үйек» икән уның исеме. Тик ысынбарлыҡта ундай ер булмағанына ҡайғыра, хафалана. Асандың «ҡайғы» тигән ҡушаматы ла шунан килеп сыҡҡан икән[2]. Әммә «оның ҡайғысы — жаҡсы үмит, болашаҡтан күткен арман есебінде келеді... Бул ретте оның ҡайғысын оптимистик ҡайғы деүге болады» (М.Ғабдуллин).

Асан Ҡайғының бөтә ижадын яңынан күҙаллап ҡарағанда, башҡорт ерлегенә тәғәйен генә урындары әҙерәк һымаҡ. Ә ҡайһы ергә ҡағылышлыһы бар һуң? Бер генә географик төбәкте лә, ер-һыу атамаһын да күрһәтмәгән йырау.Уйыл һәм Иҙел менән Яйыҡтан башҡа! Эйе, Иҙел менән Яйыҡ ике һүҙҙең береһендә тиерлек ҡабатлана. Һоҡланып та, моңһоуланып та иҫкә алына («Көлдің суын жамандап, Еділ ҡайдан табарсың?» — ҡаҙаҡ.). Йырау ғүмер буйы хыялында йөрөткән «Жер үйек» ошо түгелме? Юғиһә, уның ижадында «бөтә яҡлап ҡулай» мәғәнәһен биргән түбәндәге юлдар тыумаҫ ине:

Едил болса елиң бар,
Елиң болса жериң бар,
Ел бар жерде үниң бар,
Ел бер жерде күниң бар,
Салтың болса халҡың бар,
Халҡың болса данҡың бар.
(ҡарағалп.).

---

[1] Шер — ҡайғы, күңел моңһоулығы.
[2] Ҡаҙағстан Фәндәр академияһының Үҙәк ғилми китапханаһында һаҡлаған ҡулъяҙмалар араһында уның ҡушаматының килеп сығышы хаҡында бүтән төрлө версия ла бар.



09-2001.p65 161 29.08.01, 12:49
Black